**Тема: Айыу менән бал ҡорттары. Башҡорт халыҡ әкиәте.**

**Маҡсат:** а) әкиәттең йөкмәткеһе менән таныштырыу, уның төп фекерен, нимәне эшләргә ярай-ярамай икәнен билдәләү;
б) уҡыусыларҙың телмәр күнекмәләрен үҫтереү;
в) уҡыусыларҙа яҡшы сифаттар тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** "Башҡорт халыҡ әкиәттәре" китабы, "Айыу менән бал ҡорттары" балалар өсөн китап.

**Дәрес барышы:**

I. Ойоштороу мәле.

II. Төп өлөш.
1. Фонетик күнегеү.
1) Йомаҡ сисеү.
- Көҙ сисенә, яҙ кейенә.
- Тупраҡ ашай, һыу эсә.
Үҙе юғары үҫә.

*(ағас)*

2) Ағас исемдәрен ҡабатлау, тәржемә итеү.
*ҡарағас, ҡарағай, ҡарама, ҡайын, саған, имән, уҫаҡ, йыла, йүкә, тал.*

2. Өй эшен тикшереү.

3. Яңы тема.
1) Шиғыр өҫтөндә эш. "Йүкә балы".
*Олатай кәрәҙ ҡырҡты ла,*
*Аша, тип, өҫтәлгә*
*Кәрәҙле бал ултыртты.*
*Бына һиңә йүкә балы,*
*Бер ҡабып ҡара әле!*
*Беҙҙең яҡтың йүкәләре*
*Йәмле генә түгел икән,*
*Тәмле лә икән әле.*

*(Г. Ғәлиева.)*

2) "Айыу менән бал ҡорттары" әкиәте өҫтөндә эш.
- Уҡытыусының аңлатмалы уҡыуы.
- Һүҙлек эше: *каяу, солоҡ, кәрәҙ, бал ҡорттары, ағас ҡыуышы, тайыш табан, балта, сонтоҡ ҡойроҡ, инә ҡорт, умарта.*
- Уҡыусыларҙың берәмләп, сылбырлап уҡыуы.
- Һорауҙарға яуаптар. Яуаптарҙы китаптан табып уҡыу.

3) Айыу менән бал ҡорттары тураһында ниндәй әҫәрҙәр беләһегеҙ? (Балалар өсөн китапты ҡулланыу).
   А. Йәғәфәрованың “Нәҙекәйбил” әҫәрен иҫкә төшөрөү.
4) Ял минуты. Күҙҙәргә гимнастика.
5) Дәфтәрҙәрҙә эш. Бал тураһында тексты дәфтәрҙәргә яҙыу. “Бал”.

*Бал һаулыҡ өсөн бик файҙалы. Унда 60-ка яҡын төрлө матдә бар. Балдың бөтә сорттарында ла глюкоза менән фруктоза күп. Ә улар йөрәк мускулдарының нормаль эшләүе өсөн бик кәрәк.*

*Бал витаминдарға ла бик бай. Бал менән ашҡаҙан ауырыуҙарын да дауалайҙар. Йоҡлай алмағанда ла бал бик файҙалы.*

*Балдың кеше ғүмерен оҙайтыуы тураһында ла билдәле.*

III. Йомғаҡлау.

IV. **Өй эше**. Әкиәттән 3-сө абзацты һөйләргә өйрәнегрә.